# У р а л

Күгәрепкәй яткан Урал тауы
Ата-олатайҙарҙың төйәге,
Илен-һыуын һаклап корбан булған
Шунда ята батыр ҙа һөйәге.

Ай Уралым һинән кыркып алһам.
Ат кыуырҙай янғыҙ талдарын;
Тамып та ғына кала киҫкән сакта
Яуҙа үлгән батыр ҙа кандары.

Аткынайын менгән,кулына алған,
Ук-һаҙакай тигән коралын;
Аямаған йәнен, канға ла баткан-
һис бирмәгән башкорт Уралын.

Урал ғына тауҙың көн битендә
Атай-олатайҙар йәйҙәгән,
Талир тәнкә тағып, корок һөйрәп,
Иәш килендәр колон бәйҙәгән.

Кемдәр генә килеп әй китмәгән
Урал ғына тауҙың үнренә;
Үткән ғүмеребеҙ әй үтеп китте,
Бәрәкәт бирһен калған ғүмергә.

Урал ғына тауҙың йылғаһынын
Күперҙәре бар ҙа, юлы юк;
Урал буйкайында олатайҙарҙың
Тарихтары бар ҙа,үҙе юк.

Урал ғына буйы бигерәк йәмле
Ак тирмәндәр короп йәйҙәүгә;
Урал ғына бигерәк зыуклы
Югереп йөрөп бейә бәйҙәргә.

Саңкып та ғына саңкып әй кыскырған
Урал каяһының шоңкары.
Яҫы ла ғына яурын, киң күкрәкле
Урал егетенең дә толпары.

Урал ғына тауы бигерәк үк бейек,
Күренеп кенә ята күп ерҙәр;
Картаймайһың,Урал, тәрләнмәйһең,
Хәл беләләр килеп күп ирҙәр.

Урал ғына тауҙың әй көн бите
Турысай ғына атымдың төйәге;
Иәлдәмәгән йәнен дә үк,түккән каның,
Урал тауҙа калған ирҙең дә һөйгәне.

Иртән генә күтәрелгән томан
Туры атымдан сыккан быу икән?
Уйым күлдәр уйған туғайында
Күҙ йәшенән һарыккан һыу микән?

Урал үңерҙәре һалкын тиҙәр,
Урал үңерендә йылы юк;
Уй-хәсерәт тотоп, ялкын йотоп,
Уй уйлаған ирҙә йоко юк.

Әй яҙ булыр, дуҫтар, көҙ булыр
Яҙ булыукайҙары аҙ булыр;
Урал ғына буйы йәйләүебеҙ
Бер аҙырак көндән аҙ булыр.

Урал тауҙа булыр йорттары,
Бәйҙә тора аның аттары;
Бейә лә генә бәйҙәп, кымыҙ эсеп,
Шаулаша ла Урал карттары.

Урал да ғына Урал ай тиһегеҙ,
Урал ғына буйы кыҙырым саукы икән
Уралкайҙы мактап бер йырҙаһаң,
Күңелдәргә үҙе лә зауқы икән.

Әбйәлил районының Каҙмаш ауылында 80 йәштәге Рәүил Динмөхәмәт улы Папанин карттан 1952 йылдың 16 аугысында яҙып алдым.
/Динмөхәмәттең атаһы Бәпәнә исемле булған/.1904-1905 йылғы рус-япон һуғышында катнашкан.